*Мәликә ӘМИНЕВА*

# УСАҠТАР ҺҮРЕЛМӘҺЕН

*2001 йылдың 23 ноябрендә Силәбе өлкәһенең Магнитогорск калаһында Магнитогорск калаһы башкорт катын-кыҙҙарының I съезы булып үтте. Унда Бөтә донъя башкорттары королтайы Башкарма комитеты рәйесе урынбаҫары, Башкорт катын-кыҙҙары йәмғиәте рәйесе, филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Ғилметдин кыҙы Хисамитдинова, Башкортостан Халык мәғарифы министрлығының милли мәктәптәр бүлеге белгесе Рәйсә Абдрахман кыҙы Күзбәкова, «Ватандаш» журналының яуаплы сәркәтибе Мәликә Сәлимйән кыҙы Әминева һ.б. катнашты.*

*Съезда ғаилә, әсәлек, балалык, йәш быуынды тәрбиәләү, һуңғы йылдарҙа илдә афәткә әйләнгән эскелектән, наркоманиянан балаларҙы һаклау юлдарын эҙләү, башкорт милли мәҙәниәтен һаклау, үҫтереү, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һәм йолаларҙы тергеҙеү, тыуған телдә укытыу мәсьәләләре каралды.*

1995 йылдың июнь айында I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында «Башҡорт халҡын тергеҙеү һәм үҫтереү программаһы» ҡабул ителгәйне. Был программаны ғәмәлгә ашырыуҙа ҡатын-ҡыҙҙың, бигерәк тә ғаилә усағын тотоусы әсәнең роле бик ҙур. Шуның өсөн дә беренсе сиратта уларҙың проблемаларын хәл итеү көҫ уңында булырға тейеш. Ҡатын-ҡыҙҙың ғаиләлә тотҡан төп роле — әсә булыу, нәҫел арттырыу, ерҙә кешелек донъяһын дауам иттереү. «Бер бала — юҡ бала, ике бала — бер бала», ти халыҡ. Шул уҡ ваҡытта күп бала табыу бер батырлыҡ булһа, ул балаларҙы рухи һәм физик яҡтан сәләмәт итеп үҫтереү мең батырлыҡҡа тиң. Бай рухлы, тәүфиҡлы, белемле, юғары мәҙәниәтле итеп тәрбиәләү, туған телдә һөйләшергә, аралашырға өйрәтеү әсә кешенең төп бурысы. Бөгөнгө көндә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының хәл ителәһе мәсьәләләре бик күп. Социаль хәлдең түбәнәйеүе, эскелектең, наркоманияның, балалар енәйәтселегенең көндән-көн артыуы ҡатын-ҡыҙҙың һаулығын, рухи хәлен ҡаҡшата, йәмғиәттәге ролен кәметә. Башҡортостанда 1998 йыл Ғаилә йылы, 1999 — Бала йылы, 2000 — Йәштәр йылы, 2001 — Әсә йылы, ә 2002 йыл Һаулыҡ йылы тип иғлан ителеүе лә юҡҡа түгел. Ғаиләне нығытыу, рухлы һәм сәләмәт балалар үҫтереү, йәш быуынды тәрбиәләү өсөн ыңғай шарттар булдырыу, ҡатын-ҡыҙҙың абруйын күтәреү беҙҙең республикала иғтибар үҙәгендә тора. Республиканың ҡайһы бер ҡалаларында һәм райондарында ғаиләне пландаштырыу үҙәктәре ойошторолдо. Айырыуса күп балалы әсәләр һәм йәш ғаиләләр тураһында хөкүмәтебеҙ ҙур хәстәрлек күрә.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәтенең эшен йәнләндереү һәм юлға һалыу маҡсатында Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты 2000 йылда башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының съезын үткәрҙе. Башҡортостанда уҙғарылған бөтә был саралар республиканан ситтә йәшәгән ҡәрҙәштәребеҙгә лә ыңғай тәьҫир итмәй ҡалманы. Съездан һуң башҡорттар күпләп йәшәгән өлкәләрҙә лә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәттәренең эштәре йәнләнде. 2001 йылдың 23 ноябрендә үткәрелгән Магнитогорск ҡатын-ҡыҙҙары съезы шуның бер сағылышы.

«Туҡһандан ашыу милләт вәкиле йәшәгән Магнитогорск ҡалаһында башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары съезын үткәреү ул беҙҙең өсөн бер мәртәбә, оло ҡыуаныс һәм ғорурлыҡ, — тине съезды асҡанда ҡаланың халыҡ-ара милли мәҙәниәт үҙәге бүлеге мөдире Мәфрүзә Хөсәйенова. — Ун йыл элек тынғыһыҙ активистарыбыҙ Ф.Фазылов, З.Вафиева, З.Хөсәйенова, Ә.Хәлиловалар тырыш-

лығында Башҡорт халыҡ үҙәге ойошторолғайны. Үҙәк оҙаҡ йылдар уңышлы эшләне, ҡалабыҙҙа башҡорттарҙың килеп терәлер, фекер алышыр, күңел асыр урынына әйләнде. Бөгөнгө көндә, аллаға шөкөр, ҡалабыҙҙа башҡорт мәҙәниәте усаҡтары күбәйҙе, улар башҡорт милли мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын пропагандалауға, тергеҙеүгә күп көс һала».

Бөтә был усаҡтарға йүнәлеш биреүсе, дәртләндереүсе — Магнитогорск башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты һәм уның тынғыһыҙ етәксеһе Рәшиҙә Тайып ҡыҙы Хәкимова. Рәшиҙә Әбйәлил районының Ҡужан ауылында тыуып үҫкән. Өфөләге 1-се һанлы республика интернат-мәктәбен (хәҙерге Рәми Ғарипов исемендәге башҡорт гимназияһы) тамамлай. Ике йыл самаһы ошо уҡ мәктәптә эшләгәс, яҙмыш уны тыуған яҡтарына тарта. Магнитогорскиға килеп «Ләйсән» бейеү ансамблен ойоштороп ебәрә. Ансамбль өлкә фестивалдәрендә күп тапҡырҙар лауреат була. 1994 йылда Ф.Фазылов, М.Ғариповалар менән бергәләп Башҡорт сәнғәт йорто муниципаль учреждениеһын асыуға ирешәләр һәм уның директоры итеп Рәшиҙә Тайып ҡыҙы тәғәйенләнә. Уның өлгөрлөгөнә шаҡ ҡатырлыҡ — бейеү ансамбле етәксеһе, Башҡорт сәнғәт йорто директоры, Магнитогорск ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе, ике бала әсәһе... Бик матур ике ҡыҙ үҫтергән, ҡыҙҙары ла үҙенә оҡшап йырға, бейеүгә оҫта икән. Съезд делегаттарына арналған кисәлә үҙҙәре һалған дәртле йәштәр бейеүен күрһәттеләр. «Башҡорт һылыуҡайы» конкурсын ойоштороуҙа, Науруз байрамы, һабантуйҙар үткәреүҙә лә Рәшиҙә Хәкимова алыштырғыһыҙ ойоштороусы. Һәр йыл 9 май көндө өлкәндәрҙе йыйып ҡырға алып сыға ул. «Бишбармаҡ бешереп, йырлатып, бейетеп алып ҡайта. Оло кешегә күп кәрәкмәй, күңелдәребеҙ күтәрелеп, йәшәргә көс алып ҡайтабыҙ. Рәшиҙәбеҙгә Хоҙай тәғәлә иҫәнлек бирһен инде, бик рәхмәтлебеҙ уға», — ти Рәйсә апай. Ул үҙе лә бик әүҙем кеше. Оҙаҡ йылдар металлургия комбинатында эшләп ялға сыҡҡан, башҡорттар өсөн үткәрелгән бер генә саранан да ситтә ҡалмай, ҡулынан килгәнсә ярҙам итә.

Өс йыл элек Магнитогорскиҙа Башҡортостан Республикаһының вәкиллеге һәм Башҡорт сауҙа йорто булдырылған... «Ике субъект араһында иҡтисад һәм сауҙа бәйләнештәрен нығытыуҙа был бик әһәмиәтле аҙым булды, әлбиттә, тик беҙ, башҡорттар, шундай уҡ реаль ярҙамды гуманитар өлкәлә лә, башҡорт милли мәҙәниәтен үҫтереүҙә лә күрһәтеүҙәрен теләр инек, юғиһә Башҡортостан Республикаһы вәкиллегенең тәғәйенләнеше тик сауҙа өлкәһендә генә күренә», — тине үҙенең сығышында М.Хөсәйенова.

Вәкиллектә беҙҙең делегацияны ла ҡабул иттеләр. Һөйләшеү барышында Магнитогорскиҙа йәшәгән башҡорт балаларына башҡорт гимназияһы кәрәклеге хаҡында ла һүҙ булды. Тик был мәсьәләләрҙе улар иғтибар үҙәгенә алырмы икән? Башҡортостан Республикаһы вәкиллегенә был йүнәлештә бик ныҡ эшләйһе бар әле.

Магнитогорск милли-мәҙәни үҙәге муниципаль учреждениеһының башҡорт мәҙәниәте бүлегендә Әлфиә Мөхтәрова етәкселегендә башҡорт телен өйрәнеү курстары уңышлы эшләп килә. Бында башҡорттар менән бер рәттән башҡа милләт вәкилдәре лә, ололар ҙа, балалар ҙа теләп йөрөй. Бигерәк тә балаларҙың йәштән үк милли мәҙәниәт менән танышып, аралашып үҫеүе уғата шатландыра. «Ҡарлуғас», «Салауат» фольклор ансамблдәре, «Һнйыҡай» балалар бейеү ансамбле һәр мәҙәни сарала әүҙем ҡатнаша. Ҡалалағы берҙән-бер ҡурайсылар ансамбленең квалификациялы художество етәксеһе булмауы үкенесле. Эш хаҡы түбән булғанлыҡтан, килеүсе юҡ. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Сания Маркова етәкләгән «Йәшлек» бейеү ансамбленең сығышын һәр ерҙә көтөп алалар. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты башҡорт һәм татар әҙәбиәте китап-

ханаһына өс йыл элек башҡорт яҙыусыларының китаптарын бүләк иткән. Әлегә китапханаға йөрөүселәрҙең күбеһе оло йәштәгеләр.

1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләренә ҡарағанда, Магнитогорск ҡалаһында 12 меңдән ашыу башҡорт йәшәй. Шуның 3170 тирәһе уҡыу йәшендәге балалар. 54-се урта мәктәп базаһында ун йыл элек башҡорт кластары асыла. Башҡорт телендәге дәреслектәр һәм методик ҡулланмалар менән тәьмин итеү яғынан Әбйәлил районының ярҙамы ҙур. Гөлнур Шөгөрова етәкселегендә был кластарҙа башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыу матур ғына һөҙөмтәләр ҙә бирә. Ә бына 1999 йылдан башланғыс кластарҙа башҡорт телен уҡытыу туҡталып ҡалған. Әлеге көндә 7, 8, 9 кластарҙа ғына аҙнаһына өсәр сәғәт уҡытыу дауам итә. Шулай итеп, барлығы 47 бала үҙ телен өйрәнә. Мәктәп директоры, Башҡортостан Республикаһының мәғариф отличнигы Людмила Николаевна Панова бының сәбәбен ата-әсәләрҙең балаларын башҡорт кластарында уҡытырға теләмәүҙәре һәм мәктәпкә килеүсе балалар һаны кәмеү менән аңлата. Ғөмүмән, ҡала буйынса мәктәпкәсә йәштәге балалар һаны күпкә аҙайған. Бәлки, шулайҙыр ҙа. Шул уҡ ваҡытта ата-әсәләр менән һөйләшкәндә, улар балаларын тыуған телдә уҡытырға ҡуш ҡуллап риза булыуҙарын белдерҙе. Магнитогорск ҡалаһы башҡорттарының мәнфәғәттәрен тулыһынса ҡәнәғәтләндереү өсөн Башҡортостан Республикаһы менән Силәбе өлкәһе һәм Башҡортостан Республикаһы Халыҡ мәғарифы министрлығы менән Силәбе өлкәһе хакимиәте мәғариф идаралығы араһындағы килешеүҙәр нигеҙендә Магнитогорск ҡалаһы хакимиәтенә съезд исеменән башҡорт балалары өсөн интернат-гимназия асыуҙа ярҙам күрһәтеүҙәрен һорап мөрәжәғәт итергә тигән ҡарар ҡабул ителде.

Мәғариф өлкәһендәге тағы бер коллектив хаҡында һөйләп китке килә. Һүҙем башҡорт иҡтисад-юридик техникумының һәм Көнсығыш иҡтисад, гуманитар фәндәр һәм хоҡуҡ институтының Магнитогорскиҙағы филиалы һәм уның тынғыһыҙ етәксеһе Зәйтүнә Хөсәйенова хаҡында. Күп ауырлыҡтар менән асылған был филиал бөгөнгө көндә үҙенең уңыштары менән хаҡлы рәүештә ғорурлана ала. Зәйтүнә ханым үҙ эргәһенә көслө, белемле, берҙәм коллектив туплаған. Татыу коллективтың эше лә һәйбәт бара. Әбйәлил, Белорет районларынан уҡырға күп киләләр, сөнки Өфөгә ҡарағанда яҡыныраҡ та, уҡытыу сифаты ла бер ҙә кәм түгел.

Магнитогорск башҡорттарының тағы бер ғорурлығы хаҡында әйтмәү мөмкин түгел. Ул — «Йәнтөйәк» башҡорт телендәге теле- һәм радиотапшырыуҙар программаһы. Программаның мөхәррирҙәре Гөлдәр Хафизова менән Азамат Усманов халыҡтың күңеленә үтеп инерлек фәһемле, йөкмәткеле тапшырыуҙар әҙерләүгә күп көс һала. Аҙнаның һәр шаршамбыһында башҡорт телендә Башҡортостан хәбәрҙәре, ғөмүмән, башҡорт донъяһындағы хәл-әхүәлдәр менән таныштыра улар.

Башҡорт сәнғәте йортоноң бик йәмһеҙ генә подвалда урынлашыуы күңелде ҡырғайны. Ошо көндәрҙә генә Рәшиҙә Хәкимованан ҡыуаныслы хәбәр килде. «Яңы йорттан урын бирҙеләр, күсенергә торабыҙ», — тип шатландырҙы ул. Шулай инде, ятҡан таш аҫтына һыу үтмәй, тиҙәр. Был да Рәшиҙә Тайыповнаның тырышлығы. Шундай ҡатындар күберәк булһын ине арабыҙҙа.

Ф.Ғ.Хисамитдинова съездан һуң фекер алышыуҙа: «Башланғыс бар, дауамы нисек булыр, шул борсой», — тип хафаһын белдереп ҡуйҙы. Эйе, күп ваҡыт бик ҡыҙыулап эш башлайбыҙ, һәйбәт башлайбыҙ, изге ниәттәр менән башлайбыҙ ҙа, торабара һүреләбеҙ ҙә ҡуябыҙ шул. Күпме яҡшы башланғыстар тоҡана алмай һүнеп ҡалды. Халҡым, динем, илем, телем тип янған Магнитогорск ҡалаһы башҡорттарының кәре ҡайтмаһын, дәрте һүнмәһен, дарманы һүрелмәһен, йылдан-йыл яңы көстәр өҫтәлеп торһон.